## 1. Аңлатма яҙыу

Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙең 5-се класы өсөн башҡорт теленән эш программаһы.

Эш прогаммаһы 70 сәғәткә бүленгән (аҙнаға 2 сәғәт).

**Дәреслек:** М.Ғ.Усманова ,З.М.Ғәбитова, Г.Н.ӘбделхәеваБашҡорт теле: Уҡытыу урыҫ телендә алып барылған мәктәптәрҙең 5-се класс уҡыусылары өсөн дәреслек. Өфө: Китап, 2010.

**Программа кимәле :** базис.

**Уҡытыусының тел буйынса уҡыу- уҡытыу методик комплекты:** Ғәбитова З. М., Толомбаев Х. А. Урыҫ мәктәптәрендә башҡорт телен уҡытыуҙы ойоштороу буйынса методик кәңәштәр. – Өфө: Башҡортостан, 2006. Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙә башҡорт (дәүләт) теле һәм туған (башҡорт) тел буйынса берҙәм талаптар.

**Уҡыусылар өсөн тел буйынса уҡыу- уҡытыу методик комплекты :** М.Ғ.Усманова ,З.М.Ғәбитова, Г.Н.Әбделхәева Башҡорт теле: Уҡытыу урыҫ телендә алып барылған мәктәптәрҙең 5-се класс уҡыусылары өсөн дәреслек. Өфө: Китап, 2010

**Программа үҙенсәлектәренең характеристикаһы:** Эш программаһы Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығы тарафынан раҫланған «Башҡорт теленән программа» (Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙең I-IX кластары өсөн) нигеҙендә төҙөлдө. Төҙөүселәре: Толомбаев Х. А., Дәүләтшина М.С., Ғәбитова З. М., Усманова М. Г.- Ижевск: «Книгоград», 2008.

Башҡортостан Мәғариф Министрлығы тарафынан тәҡдим ителгән программа «42-се лицей муниципаль автономиялы дөйөм белем биреү учреждениеһының «Уҡыу планы»на ярашлы рәүештә тормошҡа ашырыла.

**Был эш программаһында федераль һәм республика закондары талаптары тормошҡа ашырыла.**

«Рәсәй Федерацияһы халыҡтары телдәре тураһында» законы, Рәсәй Федерацияһының «Мәғариф тураһында» Законы, «Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында» законы, Башҡортостан Республикаһының «Мәғариф тураһында» Законы.

5-9 кластарҙа башҡорт телен дәүләт теле булараҡ уҡытыуҙың интегратив маҡсатын уҡыусыла элементар коммуникатив компетенция формалаштырыу тәшкил итә. Элементар коммуникатив компетенция – уҡыусының типик ситуацияларҙа телдән һәм яҙма рәүештә башҡорт теле саралары ярҙамында аралашыуға әҙерлеге һәм һәләте. Шулай итеп, башланғыс кластарҙа башҡорт телен уҡытыуҙың түбәндәге маҡсаттарын билдәләп була:

- 5-9 класс уҡыусыһының телмәр мөмкинлектәрен һәм ихтыяждарын иҫәпкә алып телдән (тыңлап аңлау һәм һөйләү) һәм яҙма (уҡыу һәм яҙыу) рәүештә аралашыу оҫталығын формалаштырыу;
- уҡыусыларҙы башҡорт балалар фольклоры һәм нәфис әҙәбиәт үрнәктәре менән таныштырыу; башҡа милләт вәкилдәренә ҡарата ихтирам тәрбиәләү;
- 5-9 класс уҡыусыларының телмәр, интеллектуаль һәм танып белеү һәләтен һәм уҡыу оҫталығын үҫтереү; башҡорт телен артабан үҙләштереүгә мотивация булдырыу;
- башҡорт теле саралары ярҙамында уҡыусыны тәрбиәләү һәм уның төрлө яҡлы үҫешенә булышлыҡ итеү.

«Башҡорт теле» предметының эшмәкәрлекле характеры донъяны бөтөн, эмоциональ һәм актив ҡабул итеүсе 5-9 класс уҡыусыһының тәбиғәтенә тап килә.

**2.Уҡыу предметына дөйөм характеристика**

**Программаның йөкмәткеһе 3 йүнәлештә төҙөлгән:**

- Телмәр эшмәкәрлеген формалаштырыу, телдең системаһын (фонетика, лексика, орфография, орфоэпия, грамматика, пунктуация) өйрәнеү, бәйләнешле текст менән эшләргә өйрәтеүгә күҙ уңында тота. Шулай уҡ унда милли тәрбиә тураһында ла мәсьәлә күтәрелә.
- Тел менән әҙәби материалдары бергә ҡушып өйрәнелә (интеграция).

- Лингвистик һәм әҙәби күренештәр, уҡыу материалы нигеҙендә, практик ҡулланыу маҡсатынан сығып өйрәнелә (коммуникатив йүнәлеш).

**Башҡорт теленә өйрәтеүҙең маҡсаты һәм бурыстары**

Үрҙә әйтелгәндәрҙән сығып, уҡытыу урыҫ телендә барған мәктәптәрҙә балаларҙы башҡорт теленә өйрәтеүҙең маҡсаты һәм бурыстары түбәндәгесә билдәләнә:

- Уҡыусыларҙа башҡорт телендә һөйләгәнде, уҡығанды, радиотапшырыуҙар тыңлағанды аңлау күнекмәләре булдырыу (аудирование).
- Аралашыуҙа кәрәк була торған типик һөйләмдәрҙе күсереп, үҙ фекерҙәрен билдәле кимәлдә үҙ аллы яҙыу күнекмәләрен булдырыу.
- Башҡорт телен өйҙә, йәмғәт тормошонда, хеҙмәт процесында практик файҙаланырға өйрәтеү.
- Башҡорт телен практик өйрәнеүгә бәйләп, балаларҙы башҡорт халҡының тарихы, мәҙәниәте, сәнғәте, әҙәбиәте, милли йолалары, башҡорт халҡының күренекле шәхестәре, уларҙың эшмәкәрлеге, ижады һәм башҡалар менән таныштырыу, балаларҙы башҡорт донъяһына алып инеү, башҡорт халҡына, үҙҙәре йәшәгән төйәккә ихтирам һәм һөйөү тәрбиәләү. Текстағы яңы һүҙҙәр, фразаларҙы аңлатыу, һүҙлек эше мотлаҡ.
- Әҫәрҙе өлөшләп, һайлап, ролдәргә бүлеп, сылбыр буйынса уҡыу, тексты магнитофон яҙмаһынан тыңлау, йөкмәтке буйынса һорауҙарға яуап биреү кеүек эштәр башҡарғанда, һүҙлек эше иғтибар үҙәгендә тора.
- 4-се класта алған белемдәр тулыландырыла. Темалар буйынса яҙыусылар, шағирҙар ижады менән таныштырыу, яңы текстар уҡыу, диалог һәм монолог ярҙамында бәйләнешле һөйләм төҙөү дауам итә.
- Туған тел, белем, уҡытыусы, мәктәп һәм көҙгө байлыҡ тураһында һөйләшеү күберәк урын ала.

Бәйләнешле текст төҙөү, бер телдән икенсе телгә тәржемә итеү күнегеүҙәре башҡарыла.

**«Башҡорт теле» предметы йөкмәткеһендә тәрбиәүи ориентир ҡиммәттәре**

Уҡыу предметы буларак башҡорт теле дәрестәре белем биреүгә генә түгел, ә тәрбиәүи ҡиммәттәргә лә ҙур әһәмиәт бирә.
Изгелек ҡиммәте - үҙеңде һанап бөтөргеһеҙ бәйләнештәрҙән торған донъяның бер өлөшө итеп тойоу, кешеләрҙең тел ярҙамында бер-береһе менән бәйләнеше әҙәплелекте таныуға нигеҙләнеүен аңлау.
Аралашыу ҡиммәте - аралашыуҙы йәмғиәттең, мәҙәниәттең әһәмиәтле бер өлөшө итеп таныу.
Матурлыҡ (гармония) ҡиммәте — башҡорт теленең матур, яғымлы халыҡ байлығы булыуын аңлап үҙләштереү.
Хеҙмәт һәм ижад ҡиммәте - хеҙмәт кешелек йәшәйешенең төп шарты, хәләте булыуын ҡабул итеү. Хеҙмәткә һөйөү тәрбиәләүҙә уҡыу эшмәкәрлегенең әһәмиәте ҙур. Уҡыу эшмәкәрлеге барышында ойошҡанлыҡҡа, үҙаллылыҡҡа, яуаплылыҡҡа, хеҙмәтте һөйөргә өйрәнергә мөмкин икәнлеген аңлау.

Илһөйәрлек ҡиммәте - үҙ телеңде һәм халҡыңды хөрмәт итеү, халыҡтың йолаларын, ғөрөф-ғәҙәттәрен өйрәнеү, ғаилә, ил алдында бәләкәйҙән үк яуаплы булыуҙы тойоп үҫеү.

Кешелеклелек ҡиммәте - үҙең һәм башҡалар өсөн яуаплылыҡ тойоп үҫеү, кешенең йәшәү урыны булған тәбиғәтте һаҡлау кәрәклеген аңлау.

**3. Уҡыу планында предметтың урыны.**

Уҡыу планында башҡорт телен дәүләт теле буларак уҡытыуға 5 кластарҙа 70сәғәт бүленгән (аҙнаһына 2 сәғәт, һәр класта 70 сәғәт.)

**4. Уҡыу предметын үҙләштереүҙең шәхсиәтле, метапредмет һәм предмет һөҙөмтәләре.**

Башҡорт теле уҡытыусыһы үҙ алдына баланы өс кимәлдә үҫтереү бурысын асыҡ ҡуя.

**Шәхси үҫеш һөҙөмтәләре**

Баланы шәхес итеп үҫтереү, кешелек сифаттарын тәрбиәләү. Уны үҙ аллы үҫешкә, камиллашыу оҫталығына өйрәтеү. Һөҙөмтәлә уҡымышлы, үҙ еренең, иленең, халҡының ҡиммәттәренә төшөнгән, уны һанлаған һәм һаҡлаған, яҡлаған социум итеп форма-лаштырыуға башланғыс нигеҙ һалыу.

Был йүнәлештә уҡыусыға уҡыуҙың һәм белем алыуҙың мөһимлеген, үҫеш кәрәклеген аңлатырға, ҡыҙыҡһыныу теләген булдырырға; үҙ-үҙеңә һәм тормошто аңлауҙы сығанаҡ итеп ҡабул

итергә, тарихи- мәҙәни ваҡиғаларҙы, кешелек ҡиммәттәре менән әҙәбиәттәге айырым сәнғәт төрө икәнен белергә өйрәтергә кәрәк. Әҙәби әҫәрҙәрҙе тулыһынса һәм эмоциональ ҡабул итеү үҙ фекерендә булдырыуға һәм әңгәмәсенекен хөрмәт итеү талаптарына яуап бирә.

**Метапредмет һөҙөмтәләре**

Универсаль эш төрҙәренә өйрәтеү: танып белеү, регулятив һәм коммуникатив эшмәкәрлек, йәғни баланы үҙ аллы уҡыуға, белем алырға өйрәтеү.

- әҙәбиәттән, фәнни-популяр мәҡәләләрҙән, белемде арттырырҙай материалдарҙы, кәрәкле мәғлүмәтте таба алыу;
- әҙәби әҫәрҙәрҙе анализлау (тексты өлөштәргә бүлеү, план төҙөү, тасуирлау сараларын таба белеү) һәм текстың төп фекерен асыҡлау;
- үҙеңдең фекереңде, уйыңды әңгәмәсеңә еткерә алыу;
- тирә-йүн, тәбиғәт менән гармонияла йәшәү ҡағиҙәләрен, ысулдарын үҙләштереү;
- йәмғиәттәге тәртип һәм әхлаҡ ҡағиҙәләрен белеү;
- аңлы анализлау эшмәкәрлеген булдырыу;
- төркөмдәрҙә эшләү үҙең әһәмиәтен аңлау һәм уларҙа эшләү тәртибен үҙләштереү.

**Предмет һөҙөмтәләре:** башҡорт теле нормалары (фонетик, лексик, грамматик) тураһында башланғыс белешмә; (курс йөкмәткеһе кимәлендә) өн, хәреф, һүҙ кеүек тел берәмектәрен табыу һәм сағыштырыу һәләте.

А. Коммуникатив сферала (башҡорт телен аралашыу сараһы булараҡ өйрәнеүҙә)

<u>Телмәр эшмәкәрлегенең түбәндәге төрҙәрендә телмәр компетенцияһы:</u>

һөйләү телмәрендә:

- аралашыуҙың типик ситуацияларында элементар этикет диалог алып барыу;

– элементар кимәлдә уҡыусының үҙе, ғаиләһе, дуҫы тураһында һөйләүе; предмет, картинаны һүрәтләүе; персонажды ҡыҡҫаса ҡылыҡһырлауы;

тыңлап аңлауҙа:

- уҡыусының уҡытыусы һәм класташтарының телмәрен тыңлап аңлауы; аудиояҙмаларҙағы ҙур булмаған текстарҙың йөкмәткеһен аңлауы;

уҡыуҙа:

- өйрәнелгән тел материалына таянып төҙәлгән ҙур булмаған текстарҙы ҡысҡырып уҡыу;

- өйрәнелгән тел материалы менән бер рәттән яңы һүҙҙәрҙе лә үҙ эсенә алған текстарҙы эстән уҡыу һәм уларҙың төп йөкмәткеһен аңлау, текстан кәрәкле информацияны табыу;

яҙма телмәрҙә:

- яҙыу техникаһына эйә булыу;

- үрнәк буйынса байрам менән ҡотлау һәм ҡыҫҡа шәхси хат яҙыу.

<u>Тел компетенцияһы (тел саралары үҙләштереү).</u>

- башҡорт теленең өндәрен дөрөҫ әйтеү һәм айырыу; һүҙҙәргә һәм фразаларға дөрөҫ баҫым ҡуйыу;

- төрлө һөйләм төрҙәрен интонация менән уҡыу;

- башланғыс мәктәп курсында өйрәнелгән уҡыу һәм орфографик ҡағиҙәләрҙе ҡулланыу;

- башланғыс мәктәп курсында өйрәнелгән лексик берәмектәрҙе (һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр, баһалау лексикаһы, телмәр клишелары) һәм грамматик күренештәрҙе таныу һәм телмәрҙә ҡулланыу.

Социомәҙәни компетенция.

- географик атамаларҙы, билдәле балалар әҫәрҙәренең персонаждарын, популяр әкиәттәрҙең сюжеттарын, балалар фольклорының ҙур булмаған әҫәрҙәрен (шиғырҙар, йырҙр) белеү;

**Б.** Танып белеү сфераһы:

- айырым өндәр, хәрефтәр, һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр, ябай һөйләмдәр кимәлендә башҡорт һәм рус телдәренең күренештәрен сағыштыра белеү;

- башланғыс мәктәп тематикаһы кимәлендә өлгө буйынса күнегеүҙәр эшләй белеү;

- ҡағиҙәләр, таблицаларҙы ҡуллана белеү;

- үҙ-үҙеңде башланғыс класс уҡыусыһы кимәлендә баһалай белеү;

**В.** Дөйөм ҡиммәттәргә йүнәлеш сфераһында:

- башҡорт телен фекер, хис-тойғо, эмоцияларҙы белдереү сараһы булараҡкабул итеү;

- балалар фольклоры ярҙамында башҡорт халҡының рухи ҡиммәттәрен үҙләштереү.

**Г.** Эстетик сферала:

- башҡорт телендәге хис-тойғо һәм эмоцияларҙы белдереүсе сараларҙы үҙләштереү;

- балалар әҙәбиәте үрнәктәре менән танышҡанда матурлыҡты танырға өйрәнеү.

**Д.** Хеҙмәт сфераһында:

- уҡыу процесында билдәләнгән планға ярашлы эшләй белеү.

5. **Уҡыу предметының йөкмәткеһе.**

Башҡорт теле курсында түбәндәге йөкмәтке линияларын билдәләп була:

- телмәр эшмәкәрлегенең төп төрҙәрендә коммуникатив оҫталыҡтар;
- тел саралары һәм уларҙы ҡулланыу күнекмәләре;
- социомәҙәни компетенция;
- дөйөм уҡыу һәм махсус уҡыу оҫталыҡтары.

**Телмәрҙең тематик йөкмәткеһе.**

Һөйләү һәм яҙма телмәрҙең йөкмәткеһе белем биреү һәм тәрбиәүи маҡсаттарға тап килә һәм түбәндәге темаларҙы үҙ эсенә ала:

Һаумы, мәктәп! Башҡортостаныңды беләһеңме? Йыл миҙгелдәре. Үҙем тураһында. Яңы йыл менән! Кеше. Тән ағзалары. Аҙыҡ-түлек. Кейем-һалым. Өй. 8 март – ҡатын – ҡыҙҙар байрамы. Яҙ етте. Яҙғы эштәр. Яҙғы байрамдар.

**Коммуникатив оҫталыҡар.**

**Һөйләү телмәре**

1. Диалогик форма:

- типик ситуацияларҙа диалог алып барыу;
- һорау-яуап рәүешендәге диалог.

2. Монологик форма:

- телмәрҙең төп коммуникатив төрҙәрен (тасуирлау, хикәйәләү, ҡылыҡһырлау) ҡулланыу.

**Тыңлап аңлау**

– уҡыусының уҡытыусы һәм класташтарының телмәрен аңлауы;

- өйрәнелгән тел материалына таянып эшләнгән аудиояҙмалағы текстарҙы аңлау.

**Уҡыу**

- башҡорт теле материалына таянып эшләнгән текстарҙы ҡысҡырып уҡыу;
- өйрәнелгән материалды һәм бер нисә яңы һүҙҙе үҙ эсенә алған тексты эстән уҡыу һәм аңлау, текстан кәрәкле информацияны табыу (персонаждарҙың исемдәре, географик атамалар һ.б.).

**Яҙыу**

- текстан һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр һәм һөйләмдәрҙе күсереп яҙыу оҫталығы;
- яҙма телмәр нигеҙҙәре: байрам менән ҡотлау, ҡыҫҡа шәхси хат яҙыу.

**Тел саралары һәм уларҙы ҡулланыу күнекмәләре.**

1. Графика, каллиграфия, орфография.

Башҡорт теленең алфавиты. Йы, йе, йө, йү, йә ҡушымсалары. Өн һәм хәрефтең тап килеүе. Уҡыу ҡағиҙәләре. Төп орфографик ҡағиҙәләр. Һүҙҙәрҙең дөрөҫ яҙылышы.

2. Телмәрҙең фонетик яғы.

Башҡорт теленең специфик өндәрен дөрөҫ әйтеү һәм ишетеү. Төп орфоэпик нормалар. Башҡорт телендә баҫым. Һөйләмдең интонацион төрҙәре.

3. Телмәрҙең лексик яғы.

Лексик белемектәрҙе ике яҡлы (рецептив һәм продуктив) үҙләштереү, тотороҡло һүҙбәйләнештәр, телмәр этикеты элементтары булараҡ баһалау лексикаһы һәм телмәр клишелары. Интернациональ һүҙҙәр. Һүҙъяһалыш.

4. Телмәрҙең грамматик яғы.

Һөйләмдең төп коммуникатив төрҙәре: хәбәр, һорау, өндәү. Һорау алмаштары. Һөйләмдә һүҙ тәртибе. Раҫлау һәм инҡар итеү һөйләмдәре. Хәбәре ҡылым, исем һәм ҡушма ҡушма ҡылым менән белдерелгән ябай һөйләм. Раҫлау йәки инҡар итеү мәғәнәһен белдергән өндәү һөйләмдәр. Эйәһеҙ һөйләм. Хәҙерге заман формаһы. Ябай таркау һөйләм. Тиң киҫәкле һөйләмдәр. Һәм, ләкин теркәүестәре менән бирелгән теҙмә ҡушма һөйләмдәр. Сөнки бәйләүесе менән бирелгән эйәртеүле ҡушма һөйләмдәр. Инфинитив (уртаҡҡылым). Мөмкин, тейеш, кәрәк модаль һүҙҙәре. Исемдәрҙең һан һәм килеш менән үҙгәреше.

Сифат дәрәжәләре.

Алмаш һәм уның төрҙәре (зат, һорау, эйәлек, күрһәтеү).

Ваҡыт рәүештәре (кисә, бөгөн, иртәгә, йыш һ.б).

1000-гә тиклем төп һандар, 100-гә тиклем рәт һандары.

**Программаның йөкмәткеһе һәм төҙөлөшө**

**Һаумы, мәктәп!** Был тема, башлыса, "Көҙ" темаһы менән үрелеп бирелә. Бер үк ваҡытта, уҡыусыларҙың йәйге каникулды нисек үткәреүе, йәй ваҡытында ни эшләүҙәре, йәйге хәтирәләре лә күҙ уңында тотола.Шуға күрә ошо темаларға ҡағылышлы кәрәкле һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр бирелә. Уҡыусыға,1-4 кластарҙа өйрәнгән һүҙҙәр менән бергә яңы тәҡдим ителгән һүҙҙәрҙе файҙаланып, бәләкәй хикәйәләр, диалогтар төҙөргә тәҡдим ителә.

Грамматика буйынса ҡабатлау, исемдең күплек ялғауы, ҡалын һәм нәҙек һуҙынҡылар.

**2. Башҡортостанымды беләһеңме?** Башҡортостандың тарихы (территорияһы, данлы үткән юлы, элекке һәм хәҙерге милли составы), уның байлығы,күренекле шәхестәре тураһында бер бөтөн тыуҙырыу һәм ул турала ябай итеп һөйләп бирә алырға тейештәр. Грамматика: яңғыҙлыҡ һәм уртаҡлыҡ исемдәр, юҡлыҡ алмаштары.

**3. Йыл миҙгелдәре.** Был теманы асҡанда йыл миҙгелдәренә дөйөм мәғлүмәт бирелә. Йыл миҙгелдәрен, ай һәм көн исемдәрен башҡортса дөрөҫ әйтеүгә, дөрөҫ яҙыуға иғтибар итергә. Был теманы үтеү көҙ айына тура килә, шуға күрә диалог темалары, лексика көҙгә ҡағылышлы бирелә. Грамматика: алмаштар.

**4. Үҙем тураһында.** Был тема үҙе тураһында һөйләүсенең ғаиләһе, шәжәрәһе, һөнәре,уй-хыялдары менән бәйле. Шуға күрә ошо теманы асырлыҡ диалог темалары, уға
бәйләнешле лексика бирелә. Шәжәрә тураһында белешмә. Грамматика: Исемдәрҙең килеш менән үҙгәреше, алмаш, тартынҡыларҙың сиратлашыуы.

**5. Ҡыш.** Ҡыш – йыл миҙгеле. Ҡыш та килеп етте. Ҡыш тураһында һөйләй белеү.Яңы йыл менән ата-әсәне, класташтарҙы, туғандарҙы ҡотларға өйрәнеү.Грамматика: ҡылымдарҙың зат һәм һан менән үҙгәреүе.

**6. Кеше. Тән ағзалары.** Был тема кешенең тән өлөштәре атамаларын, эске орган исемдәрен биреү менән бергә уның шәхси гигиенаһы, һаулығы менән бергә үрелеп бирелә. Һынамыштар, юрамыштар( ҡаш тартыу, ҡул ҡысыу, төш күреү һ.б.). Грамматика: башҡорт телендә эйәлек заты,ҡылым.

**7. Аҙыҡ-түлек. Кейем-һалым. Өй.** Беҙҙең тормошобоҙ туранан-тура эш, аҙыҡ-түлек, кейем-һалым, уларҙы эшләп табыу,һатып алыу менән бәйләнгән. Һәр кем үҙ өйөндә йәшәй, әйберҙе магазиндан һатып ала, өйөнә алып ҡайта, шуғ күрә был темаларҙы бер-береһенә бәйләп биреү материалды еңел үҙләштереүгә булышлыҡ итә.Телмәрҙе практик өйрәнеүгә бик уңайлы.Грамматика: синоним.

**8. 8 март – ҡатын – ҡыҙҙар байрамы.** Был теманы үткәндә бер-берендә ҡотларға, йылы һүҙҙәр әйтергә өйрәнергә, ҡотлауҙар яҙырға күнегергә, бер телдән икенсе телгә тәржемә итергә, ҡатын-ҡыҙ яғынан туғанлыҡ терминологияһын белергә мөмкинселек ҙур.

“Минең әсәйем”, “Минең апайым”, “Минең өләсәйем” темаларына бәләкәй хикәйәләр төҙөү.

**9. Яҙ етте. Яҙғы эштәр.** Яҙ етеү менән тәбиғәттең үҙгәреүен сағылдырған бәйләнешле һөйләмдәр, бәләкәс текстар төҙөү менән бергә бында һүҙ яҙғы байрамдар тураһында бара: 1 май, 9 май. Диалогтар һәм монологтарҙа ла Еңеү көнө иғтибар үҙәгендә булырға тейеш. Батырҙарыбыҙҙың исемдәрен иҫкә төшөрөү, ветерандар тормошо тураһында әңгәмәләр ҡороу мөһим. Ҡоштар йылы яҡтан ҡайта, беренсе яҙғы сәскәләр,алмағастар, муйыл сәскәләре тураһында белешмәләр булдырыу. Яҙғы эштәр темаһын үткәндә уҡыусыларға яҙғы эштәрҙең күп икәнлеген, яҙҙың бер көнө лә ҡәҙерле икәнлеген аңлатып, шул һөнәр эштәренең исемдәрен өйрәнеү. Грамматика: Һан, үтелгәндәрҙе ҡабатлау.

**10. Йәйҙе ҡаршылайбыҙ.** Календарҙа бирелгән байрамдар менән бер рәттән башҡорт халҡының ғөрөф-ғәҙәттәрен һәм матур йолаларын да өйрәнеү.Грамматика буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау, дөрөҫ яҙыуға, әйтеүгә и итеү.

**6.Курстың тематик планы**

| № | Бүлектәр йөкмәткеһе | Сәғәттәр һаны | Эшмәкәрлек төрө |
|---|---|---|---|
| 1 | Һаумы,мәктәп! | 6 | Хикәйәләр, диалогтар төҙөү, исемдең күплек ялғауы, ҡалын һәм нәҙек һуҙынҡыларын ҡабатлау. Мәктәп тураһында һөйләшеү. Исемдәрҙең һан менән үҙгәрешен өйрәнеү. |
| 2 | Үҙем тураһында. | 6 | Үҙе тураһында, һөйләүсенең ғаиләһе, шәжәрәһе, һөнәре,уй-хыялдарын һөйләй белеү. Исемдәрҙе килеш менән үҙгәртә белеү. |
| 3 | Йыл миҙгелдәре. | 8 | Йыл миҙгелдәрен, ай һәм көн исемдәрен башҡортса дөрөҫ әйтергә, дөрөҫ яҙыурға өйрәнеү. Күрһәтеү алмаштарының килеш менән үҙгәреүен белеү. |

| | | | |
|---|---|---|---|
| 4 | Башҡортостаныңды беләһеңме? | 8 | Тыуған ил тураһында әңгәмә, яңғызлыҡ һәм уртаҡлыҡ исемдәрҙе билдәләү. |
| 5 | Кеше. Тән ағзалары. | 7 | Кешенең организмы, тән өлөштәре атамаларын ҡабатлау, тәндә таҙа тотоу, һаулыҡты һаҡлау тураһында әңгәмә.Ҡылымды ҡабатлау. |
| 6 | Ҡыш.<br>Яңы йыл менән! | 5 | Яңы йыл менән ата-әсәне, класташтарҙы, туғандарҙы ҡотларға өйрәнеү. Ҡылымды зат һәм һан менән үҙгәртә белеү. |
| 7 | Аҙыҡ-түлек. Кейем-һалым. Өй. | 8 | Аҙыҡ-түлек атамалары менән танышыу, башҡорт халыҡ аштары тураһында һөйләшеү.Кейем-һалым исемдәре, уларҙың үлсәме, кейем һатып алыу, уларҙы бөхтә тотоу. Башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәрен ҡабатлау. Синонимдарҙы өйрәнеү. |
| 8 | 8 март – ҡатын-ҡыҙҙар байрамы. | 5 | Бер-береңде ҡотларға, йылы һүҙҙәр әйтергә өйрәнергә, ҡотлауҙар яҙырға, бер телдән икенсе телгә тәржемә итеү. Антонимдарҙы ҡуллана белеү. |
| 9 | Яҙ етте. Яҙғы эштәр.<br>Яҙ. Еңеү көнө. | 10 | Тәбиғәттең үҙгәреүен сағылдырған бәйләнешле һөйләмдәр, бәләкәс текстар төҙөү, әңгәмәләр ҡороу, ҡалын һәм нәҙек өндәрҙе |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | | | ҡабатлау. Иҗектәргә бүлеү. Омонимдарҙы, һандарҙы ҡабатлау. |
| 10 | Йәйҙе ҡаршылайбыҙ. Ҡабатлау. | 7 | Башҡорт халҡының ғөрөф-ғәҙәттәрен һәм матур йолаларын өйрәнеү.Үтелгән грамматик материалдарҙы ҡабатлау. |

**7. Белем биреү процесының уҡыу-методик һәм материаль- техник материалдар менән тәьмин ителеүе.**

- башҡорт теле кабинеты;
- залдар: китапхана, интернет селтәре булған уҡыу залы.
- Уҡыу кабинетының йыһазланылышы :
- уҡыусыларҙың иҫәбе буйынса ултырыу урындары;
- уҡытыусының эш урыны;
- уҡыу-уҡытыу методик комплектының документацияһы.

**Уҡыу-уҡытыуҙың техник саралары:**

- ПК;
- мультимедиа проекторы;
- экран;
- CD, DVD.

**Уҡытыусының тел буйынса уҡыу-уҡытыу методик комплекты :**

Башҡорт теленән программа. (Уҡытыу урыҫ телендә алып барылған мәктәптәрҙең I – XI кластары өсөн). Төҙөүселәре: Усманова М.Ғ., Ғәбитова З.М. – Ижевск: «КнигоГрад», 2008.

Башҡорт теленән диктанттар һәм изложениелар йыйынтығы. Усманова М.Ғ., Ғәбитова З.М. – Өфө: Китап, 2009.

Уҡытыу урыҫ телендә алып барылған мәктәптәрҙең 5-се класс өсөн «Башҡорт теле» дәреслегенә методик күрһәтмәләр. Усманова М.Ғ., Ғәбитова З.М. – Өфө: Китап, 2006.

Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙә башҡорт (дәүләт) теле буйынса уҡыусыларҙың телмәр үҫтереүенә, яҙма эштәренә, дәфтәр тотоуҙарына һәм яҙма эштәр үткәреүгә берҙәм талаптар. (Протокол №4, 13 ғинуар 2010 йыл)

**Уҡыусылар өсөн тел буйынса уҡыу-уҡытыу методик комплекты:**

Башҡорт теле: Уҡытыу урыҫ телендә алып барылған мәктәптәрҙең 5-се синыф уҡыусылары өсөн дәреслек. Усманова М.Ғ. ,Ғәбитова З.М., Әбделхәева Г.Н. – Өфө: Китап, 2008

**Өҫтәлмә әҙәбиәт:**

Ғәбитова З.М. Теллмәр үҫтереү дәрестәре. – Өфө: Китап, 2009.

Башҡортса – русса мәҡәлдәр һәм әйтемдәр һүҙлеге. – Өфө: Китап, 1994.

Әүбәкирова З.Ф., Әүбәкирова Х.Е., Дилмөхәмәтов М.И. Мин башҡортса уҡыйым – Өфө: Китап, 2007.

Тел төҙәткестәр, тиҙәйткестәр, һанамыштар. Төҙөүселәр: Исәнғолова Ә.Ф., Дәүләтҡолова Г.Ш. – Өфө: Эшлекле династия, 2008.

Журналдар «Башҡортостан уҡытыусыһы», «Аҡбуҙат», «Аманат».

Ял минуттары өсөн күнегеүҙәр: Методик ҡулланма. Төҙөүселәр: Исәнғолова Ә.Ф., Дәүләтҡолова Г.Ш. – Өфө: Эшлекле династия, 2008.

М. Ғ. Усманова. Башҡортса русса – синонимдар һүҙлеге. - Өфө : Китап, 2010.

Саяхова Л. Г., Ураксин З. Г., Хасанова Д. М. Русско - башкирский иллюстрированный тематический словарь. Уфа: Китап, 1998.

Башкирско-русский, русско-башкирский. Учебный словарь. Усманова М.Г., Саяхова Л.Г., Киньзягулова З.И.-Уфа, 2006.

**Интернет – ресурстар:**

1..http://www.bashkortostan.ru(Башҡортостан республикаһының рәсми мәғлүмәт порталы)

2. http://misrbash.moy.su (сит ил башҡорттары)

3. http:tv-rb.ru/ проекты Тамыра, телевизионные передачи

4.http://huzlek.bashgort.com/русско-башкиркий онлайн словарь

5. http://www.kitap-ufa.ru/ Китаптар тураһында белешмә

6. http://f13.ucoz.net/

7. http://ebook.bashnl.ru/dsweb/HomePage (национальная электронная библиотека РБ)

8. http://ebook.bashnl.ru/dsweb/HomePage (культурный мир Башкортостана)
9. http://www.bashinform.ru/bash (яңылыҡтар)
10. http://bashenc.ru/ (башкирская энциклопедия)
11. http://ayatlar.org/kitaplar/tel%20oyranu/Bashkiirt%20tele%20oyratkeche'.pdf (самоучитель башкирского языка)
12. http://www.hobobo.ru/catalog/narodnye_skazki_byliny_skazaniya (башкирские сказки)
13. http://allmuz.org/melody/бейе (бейеү көйҙәре, йырҙар)

**8. Уҡыу предметы, курсы буйынса көтөлгән һөҙөмтәләр.**

**Предмет кимәленә талаптар**

- Уҡытыусы уҡыған йәки һөйләгән, үҙең уҡыған тексты аңлай алыу;
- Уҡыған әҫәр, картина, экскурсия, ҡараған фильм буйынса әңгәмәлә ҡатнаша алыу;
- Предметты, күкенеште элементар рәүештә һүрәтләү, уға мөнәсәбәтеңде белдереү;
- Программала ятлау өсөн тәҡдим ителгән әҫәрҙәрҙең тексын ятлау, 8-10 шиғырҙы яттан тасуири һөйләй белеү.
- Текстарҙы ҡысҡырып, етеҙ уҡыу, логик баҫымдарҙы, паузаларҙы дөрөҫ әйтеү;
- Художестволы әҫәрҙәрҙе тасуири уҡыу;
- Ҙур булмаған хикәйәләрҙе йәки уларҙың өҙөктәрен һөйләп биреү.
- Тиҙәйткестәрҙе, һынамыштарҙы шыма итеп әйтә белеү.Тексттан аңлашылмаған һүҙҙәрҙе, һүрәтләү, тасуирлау сараларын табыу, мәғәнәләрен аңлатыу, һүҙлектәр менән эш итеү;
- Тексттың өлөштәренә, иллюстрацияларына исем биреү, өҙөк буйынса план төҙөү;
- Хикәйә, әкиәт, мәҡәл, йомаҡ жанрҙарын практик айыра белеү.
- Исемдәрҙең һан, килеш менән үҙгәреше, күплек һәм килеш ялғауҙарының дөрөҫ яҙылышы, яңғыҙлыҡ исемдәрҙең дөрөҫ яҙылышы;
- Ҡылымдарҙың заман, һан, зат менән үҙгәреше;
- Бер телдән икенсе телгә тәржемә итеү.
- Ижади диктанттар, изложениелар һәм иншалар яҙыу.
- Яҙғанды элементар рәүештә камиллаштыра алыу.

**Уҡыу-уҡытыу программаһында планлаштырылған һөҙөмтәләрҙе үҙләштерелеүен баһалау**

Класта һәм өйҙә башҡарыла торған яҙма эштәр өйрәтеү һәм тикшереү характерында була.

Уларға түбәндәгеләр инә:

- Башҡорт теленән төрлө типтағы күнегеүҙәр;
- Тәржемә эштәре (башҡорт теленән рус теленә һәм киреһенсә);
- Дәреслектәрҙәге әҙәби текстарға пландар төҙөү;
- Һорауҙарға яҙма яуаптар һәм иншалар;
- тел һәм әҙәби материалдар буйынса аналитик һәм дөйөмләштереү тибындағы схемалар, проекттар төҙөү.

Башҡорт теленең ағымдағы, сирек йәки йыл аҙағында, шулай уҡ уҡыу йылы башында инеү диктанты, ҙур темаларҙан һуң йомғаҡлау контроль эштәре үткәрелә. Ағымдағы контроль эштәр программаның өйрәнелгән материалын үҙләштереүҙе тикшереү маҡсатында уҙғарыла. Уларҙың төрө һәм үткәреү йышлығы өйрәнелә торған материалдың ҡатмарлылығынан, уҡыусыларҙың белем кимәленән сығып билдәләнә. Ағымдағы контроль эштә р өсөн уҡытыусы йә тотош дәресте, йә уның бер өлөшөн генә файҙалана ала.

Уҡыу йылы башында инеү диктанты, сирек һәм йыл аҙағында йомғаҡлау контроль эштәре мәктәп администрацияһы менән берлектә төҙөлгән график буйынса үткәрелә. Контроль эштәрҙе сиректең беренсе көнөндә һәм дүшәмбелә үткәреү тәҡдим ителмәй.

Программа материалының үҙләштереү кимәле уҡыусыларҙың дәрестәрҙә телдән биргән яуаптарына һәм яҙма эштәренә ҡарап баһалана. Бының өсөн башҡорт теленән һәр класта түбәндәге күләм дә контроль эштәр, яҙма эштәр үткәреү ҡарала: Яҙма эштәрҙең төрҙәре:

| Яҙма эш төрҙәре | Эш күләме | Текст күләме |
|---|---|---|
| Тикшереү эше. Тест | 2 | |
| Диктант | 4 | 40 - 50 |
| Инша | 1 | 45-50 |

# Яҙма эштәрҙе баһалау нормалары

**Диктанттарҙы баһалау.**

Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәр өсөн әҙерләнгән диктанттар тексына бөтә үҙ аллы һәм ярҙамсы һүҙҙәр инә.Грамматик эштәр өҫтәп бирелгәндә,диктант текстары бер аҙ ҡыҫҡартыла.Орфограммаларҙың һәм пунктограммаларҙың дөйөм һаны 5 –се класта 8/3-тән артмаҫҡа тейеш.

**Диктантантты баһалағанда төҙәтелә,әммә иҫәпкә алынмай торған хаталар:**

1)мәктәп программаһына индерелмәгән ҡағиҙәләргә яҙылыштар;

2)әле үтелмәгән ҡағиҙәләргә яһалған хаталар;

3)автор ҡуйған ҡатмарлы пунктуация;

4)механик рәүештә бер хәреф урынына икенсеһен яҙыу.

**Тупаҫ булмаған хаталар:**

1)ҡағиҙәләрҙең иҫкәрмәләренә ҡараған хаталар;

2)бәйләү юлы менән яһалған ҡушма яңғыҙлыҡ атамаларҙа ҙур хәрефтең яҙылышына хаталар;

3)бер тыныш билдәһе урынына икенсеһен ҡуйыу;

4)үҙләштерелгән һүҙҙәрҙең ялғауҙары яҙылышына хаталар.

**Диктант бер генә билдә менән баһалана.**

«5»-хатаһыҙ йәки тупаҫ булмаған 1орфографик, 2пунктуацион хата булған эшкә: **1/0,1/2,0/2.**

«4»-2 орфографик, 2 пунктуацион , 1орфографик, 3 пунктуацион: **2/2,1/3,2/3,3/3,1/5,0/7.**

«3»- 4 орфографик, 4пунктуацион, 3 орфографик, 5 пунктуацион: 4/4,3/5,3/6,

өс бер типтағы хата ебәрелһә,6/6 хаталы эшкә лә өс ҡуйыла.

«2»- 9 орфографик, 9 пунктуацион:8/10,9/9

«1»- уҡытыусы ҡарамағында.

**Өҫтәлмә эштәрҙе баһалау:**

«5»-бөтә эш теүәл йәки бер хата булғанда.

«4»-эштең яртыһынан күберәге дөрөҫ эшләнһә.

«3»-яртыһынан әҙерәгә дөрөҫ эшләнһә.

«2»-бер эш тә дөрөҫ эшләнмәһә.

**Инша һәм изложениеларҙы баһалау.**

| Билдәләр | Баһалауҙың төп критерийҙары | |
|---|---|---|
| | Йөкмәтке һәм телмәр | грамоталылык |
| «5» | 1.Эштең йөкмәткеһе темаға тулыһынса тап килә.<br>2.Фактик хаталар юҡ.<br>3.Йөкмәтке эҙмә-эҙлекле асыла.<br>4.Эштең һүҙлеге бай.<br>5.Стиль һәм мәғәнәүи яҡтан текст камил.Эштә йөкмәтке яғынан-5,телмәр яғынан 5 кәмселек булырға мөмкин. | 3орфографик, 3 пунктуацион йә 4 грамматик хата булыуы мөмкин. |

| | | |
|---|---|---|
| "4" | 1.Эштең йөкмәткеһе нигеҙҙә темаға тура килә(бер ни тиклем тайпылыштар бар).<br>2.Йөкмәтке дөрөҫ,ләкин ҡайһы бер фактик,һөйләм төҙөлөшөндә хаталар бар.<br>3.Фекер ебендә бер ни тиклем эҙмә-эҙлелек боҙолған.<br>4.Ҡайһы бер осраҡта һүҙҙәрҙең ҡулланылышында хата китеүе мөмкин.<br>5.Эштең стиле ярайһы уҡ төҙөк һәм мәғәнәле.Дөйөм алғанда,эштең йөкмәткеһендә 8,телмәрендә 8 кәмселек булыуы мөмкин. | 7 орфографик,6 пунктуацион йәки 2 орфографик,<br>13 пунктуацион,<br>5 грамматик хата |
| "3" | 1.Эш теманан байтаҡ ҡына ситкә тайпылған.<br>2.Эштең йөкмәткеһе нигеҙҙә дөрөҫ,ләкин фактик,һөйләм төҙөлөшөндә хаталар байтаҡ.<br>3.Эҙмә-эҙлелек тулыһынса һаҡланмай,һүҙҙәрҙең ҡулланылышында хаталар бар.<br>4.Эштә йөкмәтке яғынан -15,телмәре яғынан15 хата булыуы мөмкин. | 10 орфографик,13 пунктуацион,<br>8 грамматик хата |
| "2" | 1.Эш теманы асмай.<br>2.Бик күп фактик,һүҙҙәр | 12-15орфографик,10 |

| | |
|---|---|
| ҡулланылышында хаталар ебәрелгән. | пунктуацион,12 грамматик хата . |
| 3.Эштең бөтә өлөштәрендә лә фекерҙең эҙмә-эҙлелеге боҙолған,һөйләмдәр урынлы ҡулланылмаған,бәйләнеш юҡ. | |
| 4.Эштең йөкмәткеһендә-20 ,телмәрендә-20-нән күберәк хата ебәрелгән. | |